*Зөфәр ЕНИКЕЕВ,*
*Башҡортостан Республикаһының*
*Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты,*
*юридик фәндәр кандидаты*

# МӨСТӘҠИЛЛЕК ӨСӨН КӨРӘШТӘ

1985 йылда башланған реформалар һөҙөмтәһендә «перестройка», «ускорение», «гласность», «плюрализм» тигән төшөнсәләр халыҡ-ара мәғәнә алып, йәмәғәтселек өсөн демократлаштырыу символына әүерелде. Ул сәйәсәт үҙәк һәм союздаш республикаларҙа, атап әйткәндә, Балтика буйы һәм Кавказ аръяғы республикаларында, тиҫтә йылдар буйы йыйылған проблемалар буйынса асыҡтан-асыҡ фекер алышырға мөмкинлек бирҙе. Де-юре федератив тип аталған, ләкин ысынбарлыҡта үтә тиҙ үҙәкләштерелгән һәм де-факто унитар дәүләт булып торған Советтар Союзының административ-команда нигеҙендә ҡоролған иҡтисадында «ускорение», йәғни тиҙләнеш, ғөмүмән, утопик идея ине һәм шул арҡала халыҡтың фәҡирләнеүе көсәйҙе.

Федерацияның формаль яҡтан союздаш һәм автономиялы республикаларға бүленеп ҡоролоуы, Сталин дәүерендә күп милләттәрҙең репрессияға дусар ителеүе, тотош халыҡтарҙы үҙҙәренең ғәҙәти йәшәү урындарынан башҡа төбәктәргә күсереү, шәхес культы дәүерендә милли төрләлөктө һәм башҡа халыҡтарҙың рухи тормошо үҙенсәлектәрен һанға һуҡмау илдә милләтара көсөргәнешлекте киҫкенләштерҙе. Социализмдың «сәскә атҡан» осоронда ундай проблемаларҙы күтәреп сыҡҡан кешеләргә «диссидент» тигән мөһөр һуғып йә илдән ҡыуҙылар, йә төрмәгә, йә булмаһа психиатрик дауаханаға бикләнеләр.

Атап үткән проблемалар буйынса фекер алышыу өсөн 1987 йылдың сентябрь айына КПСС-тың махсус Пленумы билдәләнде.

Башҡортостанға «үҙгәртеп ҡороу» һәм уның мөһим өлөшө — матбуғатта фекерҙәрҙең төрлөлөгө үҙәккә ҡарағанда байтаҡҡа һуңлап килде. Ул КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының демократик процестарҙы ҡабул итмәүе, ә матбуғаттың партия әһелдәренең күрһәтмәләренән ситкә сыға алмауы менән аңлатылды. Ләкин шул



*Еникеев Зөфәр Ирғәли улы 1951 йылда Баймаҡ районының Моҡас ауылында тыуған.*

*Хеҙмәт юлын 1968 йылда «Ирәндек» совхозында башлай. Свердловск юридик институтын тамамлағас (1973), Дыуан районы прокуратураһында тәфтишсе вазифаһын үтәй. 1976—1985 йылдарҙа прокуратура органдарында, юрисконсульт булып эшләй. Артабан аспирантурала уҡый һәм Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетында уҡыта. 1990 йылда Башҡорт АССР-ының Юғары Советына депутат итеп һайлана һәм Даими комиссия рәйесе вазифаһын башҡара. 1995—2000 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың Закондар сығарыу палатаһында урындағы власть, милләт, ижтимағи һәм дини берекмәләр мәсьәләләре буйынса комитет рәйесе. 1996 йылдан — Рәсәй Федерацияһының Европалағы Региондар Палатаһының (Страсбург, Франция) тулы вәкәләтле вәкиле һәм Бөтә Донъя федералистар хәрәкәте Советы (Нью-Йорк, АҠШ) ағзаһы.*

уҡ ваҡытта Башҡортостанда хәл итә торған проблемалар байтаҡ йыйылғайны.

Ғәйәт ҙур тәбиғи ресурстарға эйә булған Башҡортостан хәйерсе хәлендә ине. Сәнәғәт етештереүендә ҡаҙаныштар ысынлап та бар, ләкин ул республика халҡының матди көнкүреше кимәлендә сағылыш тапманы. Мәҫәлән, Союз халҡының 1,4 процентын тәшкил иткән БАССР халҡы төп фондттарҙың дөйөм ҡеүәте буйынса (46 миллиард һум) Союзда 5-се урынға сығып, тик Украина, Белоруссия, Үзбәкстан һәм Ҡаҙағстандан ғына ҡалышты. 1989 йылда эске милли продукт (ВНП) 24 миллиард һум, милли доход 9,8 миллиард һум (был ССР Союзы буйынса уртаса күрһәткестән 13 процентҡа күберәк) тәшкил итте. Сәнәғәт тауарҙары етештереү күләме буйынса БАССР РСФСР буйынса 8—9-сы, ә ауыл хужалығы продукцияһы етештереү буйынса 3—4-се урындарҙы биләне.

Шул уҡ ваҡытта беҙҙең республика социаль характерҙағы күп күрһәткестәр буйынса РСФСР-ҙа һуңғы урындарҙа торҙо. Мәҫәлән, йән башына тауар әйләнеше буйынса ул 70-се урында, торлаҡ менән тәьмин ителеү буйынса — 52-се, мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары буйынса — 59-сы, дауаханалар буйынса — 48-се, телефон элемтәһе буйынса 38-се урында ине.

Өҫтәүенә, Башҡортостандың күбеһенсә башҡорттар йәшәгән көньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш райондары айырыуса ауыр иҡтисади һәм социаль хәлгә төштө. Һуңғы 20-25 йылда күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән төп предприятиелар, бигерәк тә машиналар эшләү һәм металл эшкәртеү предприятиелары, көнбайыш (Октябрьский — Туймазы сәнәғәт үҙәге) һәм төньяҡ-көнбайыш (Нефтекамск сәнәғәт үҙәге) райондарында урынлаштырылды.

1966—1985 йылдарҙа Нефтекамскиҙа төп фондтар 11 тапҡырға, эшселәр һаны 4,2 тапҡырға (республика буйынса — 1,5 тапҡыр) артты. Шул уҡ ваҡытта Уралдың металлургия үҙәктәре эргәһендә ятҡан көньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш райондарҙа сәнәғәт үҫтерелмәйенсә ҡалды. Ошо райондарҙың ҡайһы бер өлөшөндәге ауылдарға (Асҡын һәм Ҡариҙел райондарын да индереп) электр энергияһы ла үтмәгәйне. Өфөнән радио һәм телевидение тапшырыуҙары ҡабул ителмәй, юлдар юҡ, күп ауылдарҙа магазиндар, клубтар, мәктәптәр авария хәлендә ине. Һөҙөмтәлә, ул төбәктә эш булмау сәбәпле, социаль, мәҙәни-көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеүгә иғтибар булманы, хеҙмәткә яраҡлы халыҡ күпләп ситкә китте. Етмәһә, колхоз, совхоз үҙәктәрен, ауыл советтарын рус һәм татар ауылдарына күсереү арҡаһында бик күп башҡорт ауылдары «перспективаһыҙ» тип бөтөрөлдө.

Былар бөтәһе башҡорт халҡы өсөн үҙ республикаһында үтә ауыр этник һәм демографик хәл тыуҙырҙы. 1989 йылда Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары бына ошоно күрһәтте: Башҡортостандағы башҡорттар совет власы йылдарында байтаҡҡа кәмегән һәм улар үҙ ерҙәрендә әкренләп милли аҙсылыҡ хәленә төшкән. 1917 йылғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, хәҙерге Башҡортостан ерендә 1 миллион 186 мең башҡорт йәшәгән һәм улар бөтә халыҡтың 36,4 процентын тәшкил иткән булһа, 80-се йылдарҙа республиканың төп халҡы ни бары 863 мең кешегә ҡалды һәм бөтә халыҡтың 21,9 процентын ғына тәшкил итте. Башҡорттарҙың һаны 70—80-се йылдарҙа ғына ла 72 меңдән ашыу кешегә кәмегән. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса үҙ милләте телен туған теле тип иҫәпләгән кешеләр һанының артыуы ыңғай мәғлүмәт булып тора. 1979 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса үҙ милләте телен туған тел тип иҫәпләгән башҡорттар 64,4 процент ҡына булһа, 1989 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу буйынса 74,7 процент тәшкил итте.

Беҙҙең ғалимдарҙың иҫәпләүе буйынса, һуңғы 10—15 йылда 580 мең крәҫтиән тыуған яҡтарынан сығып киткән һәм шуларҙың 400 мең самаһы — башҡорт. Ун йыл эсендә БАССР-ҙың көньяҡ райондарының береһе — Хәйбулла районы халҡының дүрттән бер өлөшө кәмеүе һәм китеүселәр һанының һаман арта барыуы юҡҡа түгел.

Халыҡтың һәм республиканың был аяныс хәлен башҡорт йәмәғәтселеген туплаған «Аҡ тирмә» клубы һәм «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты алдында күтәреп сыҡты. Милли интеллигенция КПСС Үҙәк Комитеты исеменә шул турала хаттар яҙҙы.

КПСС Үҙәк Комитетының 1989 йылдың сентябрь айына билдәләнгән милләт-ара мөнәсәбәттәргә арналған Пленумына әҙерләнеү Башҡортостан матбуғатында ошо мәсьәлә буйынса мәҡәләләр менән сығыш яһарға мөмкинлек бирҙе. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1989 йылдың 21 һәм 22 апрель һандарында профессор Дамир Вәлиев менән ошо юлдар авторының Башҡорт АССР-ының союздаш республика формаһында үҫешенең зарурлығы тураһында мәҡәләләре донъя күрҙе.

Башҡорт йәмәғәтселеге был тәкдимде бик ихлас ҡабул итте. 1989 йылдың 26 майында үткәрелгән «Аҡ тирмә» ултырышында Ҡадир Мәғәфүров (хәҙер Башҡорт дәүләт аграр университеты профессоры) менән бергәләп Башҡорт АССР-ын союздаш республика итеү өсөн халыҡ араһында ҡултамғалар йыйыу кәрәклеге тураһында сығыш яһаныҡ. Нефтселәр мәҙәниәт һарайына шығырым тулған халыҡ әйткәндәрҙе дәррәү күтәреп алды һәм ойоштороу эшен беҙгә йөкмәтте.

Башҡортостандың иҡтисади һәм экологик хәле тураһында мәғлүмәттәрҙе килтереп, ҡултамғалар йыйыу формаһы әҙерләп, был изге ниәтте республиканың төбәктәрендә йәйелдереү эшен башланыҡ. Ләкин беҙҙең эшмәкәрлек ул замандағы команда-административ система ҡалыптарына һыймай ине, һәм 1989 йылдың 29 майында мине КПСС-тың өлкә комитетына саҡыртып: «Ҡултамғалар йыйыу сәйәси хәрәкәт башлауҙы аңлата», — тинеләр һәм был эште туҡтатыуҙы талап иттеләр. «НКВД бөтһә лә, КГБ бар», — тип киҫәтеп ҡуйҙылар. Мин уларға: «Юрист булараҡ, закон нигеҙендә эшмәкәрлек алып барам, башлаған эште туҡтатмаясаҡбыҙ», — тип яуап бирҙем. Минең әңгәмәселәр хәлде БДУ ректорына еткереп, мине (ул заманда юридик факультетта уҡыта инем) «тура юлға» һалыуҙы һораған. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы академик Рәғиб Ғимаев минең позицияларҙың ныҡлығын бернисә һорау менән асыҡланы ла, хоҡуҡи юҫыҡтан тайпылмауымды белгәс, эшемә фатиха бирҙе. Оло шәхес, ғалим булараҡ, Рәғиб ағай Башҡортостандың киләсәге уның хоҡуҡи статусына бәйле икәнен аңлай ине.

Беҙҙең өсөн иң мөһим, иң ауыр мәсьәлә — союздаш республика статусы өсөн көрәште башҡорт халҡының ғына милли хәрәкәте түгел, ә Башҡортостан халыҡтарының дөйөм хәрәкәтенә әйләндереү бурысы торҙо. Рус телендә сыҡҡан гәзиттәрҙә аңлатыу эше алып барыу зарур ине. Ләкин «Советская Башкирия» гәзите мөхәррире беҙҙең мәҡәләләрҙе баҫыу ғына түгел, күрергә лә теләмәне. Был йәһәттән ул заманда Салауат Килдин етәкселек иткән Дәүләт телевидение һәм радио комитеты йылдам эш итте һәм рус телендә беҙҙең менән әңгәмәләрҙе халыҡҡа еткерә башланы. Өфөнөң бик күп предприятиеларында, Башҡортостандың көньяҡ район һәм ҡалаларында ғына түгел, башҡа мөйөштәрендә лә, союздаш статусҡа өндәп, «Белем» йәмғиәте аша сығыштар яһарға тура килде һәм һәр осорҙа төрлө милләт вәкилдәре, мәҫәлән, Бөрөлә, Тәтешлелә — мари, удмурт, Туймазы, Саҡмағош һәм башҡа район ауылдарында, ҡасабаларында туғандаш татар халыҡтары ҡултамғалар йыйырға әүҙем ярҙам итте.

80-се йылдарҙың икенсе яртыһында Башҡортостанда экологтар хәрәкәте киң йәйелде. Тәүге осорҙа экологтарҙың барлыҡ ҡеүәте тәбиғәткә зыян килтергән сәнәғәт объекттарын (Ағиҙел АЭС-ы, Иштуған һыу һаҡлағысы, Благовещенскиҙа төҙөлә башлаған биохимкомбинат һ.б.) ябыуға йүнәлтелгәйне. Экологтар хәрәкәтенә мин 1983 йылда Сибайҙа эшләгән осорҙа ҡатнаша башлағайным һәм 1988 йылда Мәскәүҙә «Правовая охрана природы в Башкирской АССР» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡланым. Юрист булараҡ, экологтар хәрәкәтендә хоҡуҡи мәсьәләләр буйынса яуаплы инем. Өфө ҡала һыу үткәргес селтәре фенол менән ағыуланғас, меңәрләгән кешеләрҙе йәлеп итеп, Өфөлә митингылар үткәрҙек. Хәрәкәттә әүҙем ҡатнашҡан профессор Марс Сафаров, яҙыусы Борис Павлов бик популяр кешеләргә әйләнде. Тәүге осорҙа союздаш республика идеяһын Борис Павлов милләтселәрҙең шашыуы тиеберәк ҡабул иткәйне. Ләкин республиканың хоҡуҡи һәм иҡтисади хәлен факттар менән аңлатҡас, ул беҙҙең хәрәкәттең әүҙем көрәшсеһенә әйләнде.

«Советская Башкирия» гәзите «Союздаш республика статусы башҡорт милләтселегенә килтерә, шуға күрә лә иҡтисади үҙаллылыҡ алһаҡ та етә» тигән фекерҙе алға һөрҙө. Беҙ шул ваҡыттағы РСФСР, СССР Конституцияларына таянып, авто-

номиялы республикаларҙың бюджеты үҙаллы түгел, юғарынан билдәләнә һәм шуға күрә лә союздаш республика статусы алмайынса, иҡтисади үҙаллылыҡ утопия икәнлеген халыҡҡа аңлатырға тырыштыҡ.

1989 йылда СССР Юғары Советы Литва, Латвия һәм Эстония республикаларының иҡтисади үҙаллылығы тураһында закон ҡабул итте. Ләкин административ система ул законды ғәмәлгә ашырырға мөмкинлек бирмәне һәм ул республикаларҙың Союздан сығыу сәбәптәренең береһе булып торҙо. Һуңынан, үҙаллы дәүләт булып киткәс, Балтика буйы республикалары «Киләсәктә Рәсәй менән бер ниндәй ҙә сәйәси килешеүгә (договорға) инмәҫкә һәм Рәсәй ҡатнашҡан сәйәси союздарға ағза булып тормаҫҡа» тигән закон ҡабул итте.

1989 йылдың йәйендә союздаш республика статусы алыу өсөн Башҡортостанда 300 меңдән ашыу ҡултамға йыйылды. КПСС Үҙәк Комитетының милли мөнәсәбәттәргә арналған сентябрь Пленумында сығыш яһарға кәрәк ине. КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетында эшләгән Александр Аринин менән талиптар ятағында күрше йәшәй инек һәм союздаш республика файҙаһына булған барлыҡ материалдарҙы уға бирҙем, Хәбибуллин сығышының тезистарын әҙерләштем. Р.Хәбибуллин союздаш республика статусын яҡлап Мәскәүҙә сығыш яһағандан һуң, партия дисциплинаһында тәрбиәләнгән номенклатура халыҡ хәрәкәтенә ҡушылды. Рус телендә нәшер ителгән гәзиттәрҙә лә беҙҙең материалдар донъя күрә башланы.

1989 йылдың 1 ноябрендә Башҡорт АССР-ының сираттан тыш 13-сө сессияһы булды. Сессия алдынан беҙ бер төркөм депутаттар араһында өгөт-нәсихәт алып барҙыҡ һәм һөҙөмтәлә түбәндәге документ хасил булды:

«Мы, нижеподписавшиеся депутаты Верховного Совета БАССР, в порядке законодательной инициативы просим поставить на повестку дня настоящей сессии вопрос об изменении статуса БАССР в союзную республику. При этом мы основываемся на волеизъявлении более 150 тысяч избирателей, которые поставили свои подписи в пользу статуса союзной республики.

Этот вопрос обсуждался в периодической печати и находит поддержку у основной части трудящихся Башкирии».

Мөрәжәғәткә депутаттар: Әйүпов, Ниғмәтуллин, Фазылов, Мөтиғуллин, Лапшина, Бикйәнов, Янгуразов, Дәүләтҡолов, Аралбаева, Ғәликәев ҡултамғаларын ҡуйҙы. Тырышлыҡ бушҡа китмәне. Республиканың закондар сығарыу органы «Башҡорт АССР-ына союздаш республика статусы биреү тураһында тәҡдимдәр әҙерләү өсөн Башҡорт АССР-ының Юғары Советы комиссияһы»н төҙөнө. Комиссия составына 54 кеше индерелде һәм улар тулыһынса тиерлек номенклатура вәкилдәре ине. Статус өсөн хәрәкәтте ойоштороусыларҙың береһе лә комиссия составына индерелмәне. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, комиссия төҙөлөүе беҙҙең өсөн ҙур еңеү ине. Сөнки йәмәғәтселек башлаған хәрәкәттең идеяһы Башҡорт АССР-ында дәүләт идеяһы кимәленә күтәрелде.

1990 йылдың 4 мартында Башҡортостан тарихында тәүге тапҡыр Башҡорт АССР-ы Юғары Советына, урындағы Советтарға демократик һайлауҙар үтте һәм депутат булып союздаш республика яҡлыларҙы һайланылар, ә ҡайһыларыбыҙ башҡарма власть структураларына эшкә күсте. Мәҫәлән, Хәлил Барлыбаев — Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советына иҡтисад бүлеге мөдире, Мансур Әйүпов — рәйес урынбаҫары булып. БАССР Юғары Советының рәйесе итеп М.Ғ.Рәхимов һайланғас, республиканың статусын үҙгәртеү өсөн көрәштең яңы этабы башланды. Ул ваҡытта киң йәмәғәтселектә республиканың киләсәк статусы тураһында ҡыҙыу бәхәстәр барҙы. Өфө ҡала советы депутаттары союздаш республика статусына ҡырҡа ҡаршы сығыш яһаны. Уларҙың позицияһы Б.Н.Ельцинға яҙған хатта ла асыҡ сағыла.

Союздаш статусына Өфө ҡалаһының Октябрь район советы депутаттары ла ҡаршы сыҡты. Ғөмүмән, Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа туғандаш башҡорт менән татар халыҡтарын ҡапма-ҡаршы ҡуйыу өсөн эҙмә-эҙлекле эш алып барылды. Уның өсөн билдәһеҙ «Дружба народов» йәмғиәте исеменән листовкалар тараттылар.

Ләкин провокаторҙарҙың емерткес эштәрен рус, татар халыҡтары ҡабул итмәне. Уның тураһында «Вечерняя Уфа» гәзитенең 1990 йылдың 24 августында донъя күргән «Скажи, какой ты национальности» тип аталған мәҡәлә лә раҫлай. Социолог О.Чогина үткәргән тикшереүҙәр башҡорттарҙың, рустарҙың һәм татарҙар-

ҙың да союздаш республика статусы идеяһын бер тиң хуплауын иҫбатлай.

Шул уҡ ваҡытта республиканың Юғары Советы һәм Министрҙар Советында Декларацияның проекттары өҫтөндә эш ҡайнаны. 2 августа Башҡорт АССР-ы халыҡ депутаттарына Декларацияның ике варианты таратып бирелде. Уларҙың береһе Министрҙар Советы исеменән әҙерләнгәйне һәм ул проекттың тәүге статьяһында уҡ «Башҡорт ССР-ының суверенитеты ССР Союзы һәм Рәсәй федератив субъекты булараҡ республика статусынан сыға...» тип яҙылғайны. Был Башҡортостанды ике хужаға буйһондороуҙы аңлата һәм, әлбиттә, союздаш статусы өсөн хәрәкәттең төп идеяһына ҡаршы килеү ине. Ғөмүмән, ғәҙеллек өсөн, ул дәүерҙә дәүләт аппараты хеҙмәткәрҙәренең күпселеге союздаш статусы идеяһына һәм үҙаллылыҡҡа ышанмаусанлыҡ күрһәтеүҙәрен әйтеп үтеү кәрәктер. Уларҙа корпоратив теләктәшлек көслө булды. Һайлауҙар һөҙөмтәһендә власҡа килгән яңы быуын хеҙмәткәрҙәренең эшмәкәрлегенә төрлөсә аяҡ салып маташтылар. Шулай уҡ, суверенитет алыу башҡортҡа ғына кәрәк, әйҙә улар эшләһен, тигән ҡараш та йәшәне. Ул бигерәк тә Декларация һәм һуңыраҡ Конституция, Договор проекттарын әҙерләгәндә лә ныҡ һиҙелде. Татар ижтимағи үҙәге активистарының һәм шовинистик рух менән ағыуланған ҡайһы бер рус милләте вәкилдәренең суверенитетҡа һәм бигерәк тә Башҡортостандың союздаш республика статусына ҡаршы ғауға ҡуптарыуҙары республика етәкселәрен шөбһәгә һалды.

Шул осорҙа йәш ғалим-юристар Анатолий Тимонин, Люциә Ғүмәрова, Данил Йосопов менән бергәләп суверенитет тураһында Декларацияның тағы ла бер вариантын әҙерләнек. Ул проект республика гәзиттәрендә 11 августа Министрҙар Советы әҙерләгән проект менән бергә донъя күрҙе. Унда беҙ Башҡортостан фәҡәт Союз субъекты була тип билдәләнек. Проект күләме ҙур ғына килеп сыҡты, 46 статьянан тора. Беҙҙең уйыбыҙса, Башҡортостан киләсәктә демократик, социаль, хоҡуҡи һәм үҙаллы һалым системаһы, бюджеты, хоҡуҡ системаһы булған дәүләт булырға тейеш ине. Һуңынан проекттың күп кенә положениелары Башҡортостан Конституцияһы һәм Рәсәй менән төҙөгән Договор текстарына индерелде. Демократик ҡарашлы йәмәғәтселек Башҡортостан союздаш республика кимәлендәге суверенитет алһа, халыҡҡа тик файҙаға ғына буласағын аңланы, Юғары Совет депутаттары һәм республика етәкселегенә ғалим-юристар әҙерләгән ошо документҡа таянып эш алып барырға мөмкинлек бирҙе.

1990 йылдың 29 августында Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы булған тәҡдимдәрҙе туплап, Башҡортостан дәүләт суверенитеты декларацияһының проектын әҙерләү өсөн эш төркөмө төҙөнө һәм Башҡортостандың киләсәк сәйәси-хоҡуҡи статусы шул аппарат хеҙмәткәрҙәренең позицияһына барып терәлде. Текст өҫтөндә бәхәстәр 10 октябргә тиклем дауам итте. Ул ваҡытта Башҡорт АССР-ы Юғары Советы рәйесе Мортаза Рәхимов, эш сәғәттәре бөткәс, кис, текст өҫтөндә эшләгән яуаплы хеҙмәткәрҙәрҙе саҡырып, эш барышын тикшереп торҙо. Улар һәр көн Министрҙар Советы әҙерләгән тексты хуплап, шуны депутаттар ҡарамағына сығарырға өндәне. Миңә, улар менән бәхәскә кереп, союздаш республика өсөн хәрәкәттең позицияһын аңлатырға, төрлө яҡтан нигеҙләргә тура килде. 9 октябрҙә М.Ғ.Рәхимов беҙҙең үҙ-ара бәхәсте ҙур иғтибар менән тыңлап, компромисслы вариант эшләргә ҡушты. Һөҙөмтәлә, Декларацияның икенсе статьяһы «Башҡорт ССР-ның ССР Союзы, РСФСР, башҡа республикалар менән мөнәсәбәттәре Союз Договоры, РСФСР менән Договор, башҡа республика-ара договорҙар һәм килешеүҙәр менән билдәләнә» тигән декларация проекты депутаттарға тәҡдим ителде һәм шул килеш ҡабул ителде. Был норма 1992 йылдың 31 мартында төҙөлгән Федератив договорҙы Башҡортостан исеменән айырым ҡушымта менән ҡабул итеп, республиканың үҙаллылығын нығытырға мөмкинлек бирҙе. Декларация Конституцияға һәм Рәсәй менән 1993 йылдың авгусында төҙөлгән Договорға ла нигеҙ булып тора. Бөгөн Башҡортостандың хоҡуҡтары Рәсәй Федерацияһының башҡа республикаларына ҡарағанда байтаҡҡа киң булыуы башҡорт халҡының 80-се йылдарҙағы хәрәкәтенең емеше ул.